Рәсәй Федерацияһы Башҡортостан Республикаһының муниципаль район Учалы районының Исхаков Алмас Сәлим улы исемендәге Уральск ауылы муниципаль бюджет белем биреү учреждениеһе урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| Ҡаралды | «Килешелде » | «Раҫлайым » |
| Мәктәп методик берекмәһе етәксеһе | директор урынбаҫары | Директор |
| Р.Р. Камалова | Д.О.Сәйетхужина | Етимбаева А.Р. |
| ____________ | ____________ | ____________ |
| Протокол № 1 | | Приказ № 159 |
| «26» 08 2023 й. | «3» 08 2023 й. | «__» 08 2023 й. |

**1-се категориялы уҡытыусы**
**Дәүләтшина Мөнирә Сарим ҡыҙының**

**5-9 КЛАСТАР ӨСӨН**
**«ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ БУЙЫНСА**
**ЭШ ПРОГРАММАҺЫ**

**2023-2024 уҡыу йылы**

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ПРЕДМЕТЫН ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ ҮҘЛӘШТЕРЕҮҘЕҢ КӨТӨЛГӘН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» академик предметын төп мәктәптә өйрәнеү уҡыусыларҙың шәхси, мета-предметлы һәм предметлы һөҙөмтәләренә өлгәшеүгә йүнәлтелгән.

### Шәхси һөҙөмтәләре

«Тыуған (башҡорт) әҙәбиәте» белем биреү предметын төп дөйөм белем биреү кимәлендә үҙләштереүҙең шәхси һөҙөмтәләре традицион рус социаль-мәҙәни һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәренә, йәмғиәттә ҡабул ителгән тәртип ҡағиҙәләренә һәм нормаларына ярашлы белем биреү һәм тәрбиә эшмәкәрлеге берҙәмлегендә өлгәшелә, үҙ-үҙеңде белеү, үҙ-үҙеңде тәрбиәләү һәм үҙ-үҙеңде үҫтереү, шәхестең эске йөкмәткеһен формалаштырыу процестарына булышлыҡ итә.

Программаны үҙләштереүҙең шәхси һөҙөмтәләре уҡыусыларҙың ыңғай ҡиммәткә ынтылыш йүнәлеш алырға әҙерлеген һәм электрон нигеҙҙә үҙенең тәжрибәһен киңәйтеүҙе, белем алыу эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәрен тормошҡа ашырыу процесын сағылдырырға тейеш.

***Граждандлыҡ белеме:***

– граждандлыҡ бурыстарын үтәргә әҙер булыу һәм үҙ хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыу, башҡа кешеләрҙең хоҡуҡтарын, ирекләрен һәм законлы мәнфәғәттәрен хөрмәт итеү;

– ғаилә, мәғариф ойошмалары, урындағы йәмәғәтселек тормошонда әүҙем ҡатнашыу, тыуған төйәктәге, илдәге хәлдәрҙән хәбәрҙар булыу һәм уларҙы башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылдырылған ситуациялар менән сағыштырып анализлай һәм баһалай белеү;

– экстремизм, дискриминация кеүек күренештәрҙе кире ҡағыу;

– төрлө социаль институттарҙың кеше тормошонда ролен аңлау; күп мәҙәниәтле һәм күп конфессиялы йәмғиәттә граждандарҙың төп хоҡуҡтары, ирекләрен һәм бурыстарынтәьминитеүсе социаль нормаларҙың һәм шәхес-ара мөнәсәбәттәр ҡағиҙәләренең идеяһы, башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрендә ләсалышынкүреү;

– төрлө уртаҡ эшмәкәрлеккә әҙерлек, үҙ-ара аңлашыуға ынтылыш һәм үҙ-ара ярҙам; мәктәптә үҙидаралыкта әүҙем ҡатнашыу;

– гуманитар эшмәкәрлектә ҡатнашырға әҙер булыу (мохтаж кешеләргә ярҙам; ирекмәнлек);

***Патриотик тәрбиә:***

– күп мәҙәниәтле һәм күп конфессиялы йәмғиәттә кешеләрҙең граждандлыҡ үҙаңын берҙәмлеген таныу, илдә йәшәгән башҡа халыҡтарҙың араһында башҡорт теленең ролен аңлау;

– «Туған (башҡорт) әҙәбиәт» темаһы контексында башҡорт телен белеүгә, Рәсәй Федерацияһының тарихына һәм мәҙәниәтенә, башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу;

– башҡорт теленә, Тыуған ил — Рәсәй ҡаҙаныштарына, фәнгә, сәнғәткә, халыҡтың хәрби батырлығына һәм хеҙмәт ҡаҙаныштарына, ихтирамлы мөнәсәбәт тәрбиәләү;

– Рәсәй символдарын хөрмәт итеү, дәүләт байрамдары, тарихи мираҫҡа, тәюиәғәт ҡомартҡыларына, тыуған илендә йәшәгән төрлө халыҡтарҙың традицияларына һаҡсыллыҡ һәм ихтирам тәрбәиәләү;

***рухи-әхлаҡи тәрбиә:***

– төрлө ситуацияларҙа әхлаҡи ҡиммәттәргә һәм нормаларға өҫтөнлөк биреү;

– тәртибеңде, һөйләгән һүҙҙәреңде, ҡылған ҡылыҡтарыңды шулай уҡ башҡа кешеләрҙең ҡылыҡтарын әхлаҡи-хоҡуҡи нормалар күҙлегенән баһаларға әҙер булыу;

– социаль ғәмәлдәрҙе ҡәтғи кире ҡағыу;

– үҙең һәм йәмәғәтселлек алдынды шәхестең азатлығы һәм яуаплылығы мәсьәләһен алғы планға ҡуйыу;

***Эстетик тәрбиә биреү:***

– сәнғәттең төрлө төрҙәрен, традицияларҙы, үҙ халҡыңдын һәм башҡа халыҡтарҙың ижадын тәрән аңлау һәләтен үҫтереү;

– сәнғәттең эмоциональ йоғонтоһон аңлау; аралашыу һәм үҙ-үҙеңде танытыу сараһы булараҡ художество мәҙәниәтенең мөһимлеген аңлау;

– аралашыу сараһы булараҡ башҡорт теленең әһәмиәтен аңлау;

– ватан һәм донъя сәнғәтенең әһәмиәтен, этник мәҙәни традицияларҙың һәм халыҡ

ижадының ролен аңлау;

– сәнғәттең төрлө төрҙәрендә үҙ-үҙеңде танытыуға ынтылыш тәрбиәләү;

***физик тәрбиә, сәләмәтлек һәм эмоциональ именлек мәҙәниәтен формалаштырыу:***

– уҡыу процесында тупланған тәжрибәһенә нигеҙләнгән тормоштоң ҡәҙерен аңлау;

– үҙ сәләмәтлегенә яуаплы ҡараш, сәләмәт йәшәү рәүешенә өҫтөнлөк биреү (сәләмәт туҡланыу, гигиена ҡағиҙәләрен үтәү, дәрестәрҙең һәм ялдарҙың тигеҙ режимы, даими физик әүҙемлек);

– насар ғәҙәттәрҙең (алкоголь, наркотиктар ҡулланыу, тәмәке тартыу) һәм физик һәм психик сәләмәтлеккә зыян килтереүҙең башҡа төрҙәре) эҙемтәләрен аңлау;

– хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү, шул иҫәптән интернет мөхитендә белем алыу процесында хәүефһеҙ тәртип булдырыу;

– көсөргәнешле хәлдәргә, үҙгәреп тороусы социаль мәғлүмәти һәм тәбиғи шарттарға яраҡлашыу, үҙ тәжрибәңә таянып килеп тыуған ситуациянан сығыу һәм аңлау һәм артабан маҡсаттар төҙөү;

– үҙеңде, башҡаларҙы нисек бар шулай ҡабул итә алыу һәләте;

– үҙеңдең дә башҡаларҙың да эмоциональ торошон аңлап килептыуған хәлдән сығыу өсөн тейешле тел сараларын ҡулланыу, шул иҫәптән башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр миҫалдарына таяныу;

– уйланыу оҫталығын формалаштырыу, башҡаларҙың да хата яһауға хоҡуғын таныу;

***Хеҙмәт тәрбә:***

– технологик һәм социаль йүнәлешле практик проблемаларҙы (ғаилә, мәктәп, ҡала, өлкә эсендә) хәл итеүҙә әүҙем ҡатнашыу, быңдай эшмәкәрлекте башлап ебәреү, планлаштырыу һәм үҙ аллы башҡарыу һәләте;

– төрлө һөнәрҙәрҙе һәм хеҙмәтте практик өйрәнеү, хеҙмәтте хөрмәт итеү һәм хеҙмәт эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре менән ҡыҙыҡһыныу;

– шәхси һәм йәмәғәт мәнфәғәттәрен һәм ихтыяждарын иҫәпкә алып, үҙеңдең тормош пландарын индивидуаль траекторияһын аңлы һайлау һәм төҙөү;

– киләсәккә пландарың тураһында һөйләү һәләте;

***Экологик тәрбиә:***

– тирә-яҡ мөхит өлкәһендәге проблемаларҙы хәл итеү, ғәмәлдәрҙе планлаштырыу һәм уларҙың тирә-яҡ мөхит өсөн мөмкин булған эҙемтәләрен баһалау өсөн социаль һәм тәбиғи фәндәр өлкәһенә ҡараған белемдәрен ҡулланыуға йүнәлеш биреү;

– экологик проблемаларға үҙ ҡарашын анығ, эҙмә-эҙлекле сағылдырыу һәләте;

– экологик мәҙәниәт кимәлен күтәреү, экологик проблемаларҙың глобаль характерын һәм уларҙы хәл итеү юлдарын аңлау;

– тирә-яҡ мөхиткә зыян килтереүсе ғәмәлдәрҙе, шул иҫәптән экологик проблемалар күтәргән әҙәби әҫәрҙәр менән танышҡанда барлыҡҡа килгән ғәмәлдәрҙе әүҙем кире ҡағыу;

– тирә-яҡ мөхиткә зыян килтереүсе ғәмәлдәрҙе әүҙем кире ҡағыу;

– тәбиғи, технологик һәм социаль мөхиттәрҙең үҙ-ара бәйлелеге шарттарында үҙеңден граждандыҡ һәм ҡулланыусы роленде аңлау;

– экологик практикала ҡатнашырға әҙер булыу;

***фәнни белем ҡиммәттәре:***

– үҙ эшмәкәрлегеңдә кешенең, тәбиғәттең һәм йәмғиәттең төп үҫеш закондары, кешенең тәбиғи һәм социаль мөхит менән мөнәсәбәттәре тураһындағы фәнни фекерҙәр системаһына йүнәлеш биреү;

– телде үҙләштереү һәм уҡыу мәҙәниәте, донъяны аңлау сараһы булараҡ уҡыу оҫталығы;

– мәктәптә тел өйрәнеүҙең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлегенең төп принциптарын үҙләштереү;

– булған тәжрибәне, күҙәтеүҙәрҙе, ғәмәлдәрҙе файҙаланп һөҙөмтәләргә өлгәшеү юлдарын камиллаштырыуға ынтылыштәрбиәләү;

***Уҡыусының социаль һәм тәбиғи мөхит шарттарының үҙгәреүенә яраҡлашыуын тәьмин иткән төүге һөҙөмтәләр:***

– социаль тәжрибә, төп социаль ролдәрҙе, социаль тәртип нормаларын һәм ҡағиҙәләрен, төркөмдәрҙә һәм общиналарҙа, шул иҫәптән ғаиләлә, профессиональ эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән төркөмдәрҙә, шулай уҡ башҡа мәҙәни мөхиттәрҙән булған

кешеләр менән социаль аралашыу сиктәрендә социаль тормош формаларын үҙләштереү;

– уҡыусыларҙың таныш булмаған шарттарҙа үҙ-ара аралаша алыу һәләте, башҡаларҙың тәжрибәһенә һәм белемдәренә асыҡлығы;

– таныш булмаған шарттарҙа эш итеү һәләте, ғәмәли эшмәкәрлек, шул иҫәптән башҡа кешеләрҙән белем алыу, башҡаларҙың берлектәге эшмәкәрлектәге тәжрибәһенән яңы белем, оҫталыҡ һәм компетенциялар алыу мөмкинлеге;

– образдарҙы асыҡлау һәм уларҙы үҙ-ара бәйләү оҫталығы, яңы белемдәр формалаштырыу һәләте, төрлө объекттар һәм күренештәр, (шул иҫәптән элек билдәле булмаған объекттар) тураһында идеялар, төшөнсәләр, гипотезалар формалаштырыу, үҙ белемдәренең һәм компетенцияларының етешһеҙлеген аңлау, үҙенеңартабанғы үҫешен планлаштырыу;

– тотороҡло үҫеш концепцияһы өлкәһендәге төп төшөнсәләр, терминдар һәм идеялар менән эш итеү, тәбиғәт, йәмғиәт менән иҡтисадтың үҙ-ара бәйләнешен анализлау һәм асыҡлау, тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһон, килеп тыуған проблемаларҙы, мөмкин булған глобаль эҙемтәләрҙе иҫәпкә алып баһалау һәләте;

– көсөргәнешле ситуацияны аңлау, уныың эҙемтәләрен тормоштәжрибәһенә нигеҙләнепбаһалау һәләте,килептыуған хәлде ҡаршы саралар күреүҙе талап иткән сынығыу тип ҡабул итеү;

– стресс хәлен баһалау, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы һәм ғәмәлдәрҙе көйләү; хәүефтәрҙе һәм эҙемтәләрҙе формулировкалау һәм баһалау, тәжрибә формалаштырыу, килеп тыуған ситуациянан килеп сығыу мөмкинлеген эҙләү; уңыш гарантиялары булмаған осраҡта эш итергә әҙер булыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре**

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә укыусы белем алыуҙың универсаль сараларын үҙләштерә:

***Төп логик ғәмәлдәр:***

– өйрәнеләһе объекттарҙың (художестволы текстарҙың, әҙәби геройҙарҙың һ.б.) үҙенсәлекле яҡтарын таба һәм ҡылыҡһырлаә белеү;

– классификацияның мөһим үҙенсәлеген табыу һәм әҙәби объекттарҙы шул нигеҙҙә классификациялау, уларҙы дөйөмләштереү, сағыштырыу һәм анализлау өсөн критерийҙарын билдәләү;

– текста ҡаралған әҙәби факттарҙа һәм күҙәтеүҙәрҙә ҡалыптарҙы һәм ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы асыҡлау буйынса тәҡдим ителгән бурысты иҫәпкә алып;ҡалыптарҙы һәм ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы асыҡлау критерийҙарын тәҡдим итеү;

– мәсьәләге хәл итеү өсөн кәрәкле мәғлүмәттәрҙе асыҡлау;

– әҙәби күренештәрҙе һәм процестарҙы өйрәнеүҙә сәбәп-эҙемтә мөнәсәбәттәрен асыҡлау;

– дедуктив һәм индуктив һығымталар, аналогия буйынса һығымталар яһау, улар араһындағы бәйләнеш тураһында гипотезалар формулировкалау;

– төрлө текстар менән эшләгәндәмәсьәләне хәл итеү ысулын үҙ аллы һайлайбелеү(бер нисә вариантты сағыштырыу, үҙ аллы һайланған критерийҙарҙы иҫәпкә алып, уларҙың иң ҡулайлыһын файҙаланыу);

***Төп ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеге:***

– бирелгән һорауҙарҙы әҙәби белем алыуҙа танып белеүҙең тикшеренеү ҡоралы итеп ҡулланыу;

– үҙ фекереңде раҫлау, үҙ позицияңды яҡлау өсөн башҡаларҙың фекерҙәренең дөрөҫлөгө тураһында гипотеза булдырыу;

– үҙең үҙ аллы төҙөгән планға нигеҙләнеп, өйрәнеүҙең әҙәби объектының үҙенсәлектәрен, сәбәп-эҙемтә мөнәсәбәттәрен һәм объекттарҙың үҙ-ара бәйлелеген асыҡлау буйынса ҙур булмаған тикшеренеү үткәреү;

– күҙәтеү, тәжрибә үткәреү, тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре буйынса үҙ аллы дөйөмләштереүҙәр һәм һығымталар яһау; алынған һығымталарҙың һәм дөйөмләштереүҙәрҙең ышаныслылығын баһалау юлдарына эйә булыу;

– ваҡиғаларҙың артабанғы үҫешен һәм уларҙың эҙемтәләрен оҡшаш ситуацияларҙа күҙаллау, шулай уҡ уларҙың яңы шарттарҙа һәм контекстарҙа,(шул иҫәптән әҙәби әҫәрҙәрҙә) үҫеше тураһында фараздар яһау;

***мәғлүмәт менән эшләү:***

– тәкдим ителгән белем биреү заданиеһын һәм билдәләнгән критерийҙарҙы иҫәпкә алып, әҙәби һәм башҡа мәғлүмәттәрҙе йәки сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәрҙе эҙләгәндә һәм һайлағанда төрлө ысулдарҡулланыу;

– төрлө төрҙәге һәм презентация формаларының әҙәби һәм башҡа сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәрҙе һайлау, анализлау,системалаштырыу һәм интерпретациялау;

– төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарында оҡшаш дәлилдәр табыу (бер үк фекерҙе, версияны раҫлау йәки кире ҡағыу);

– әҙәби һәм башҡа мәғлүмәт менән таныштырыуҙың оптималь формаһын үҙ аллы һайлау һәм ябай схемалар, диаграммалар,төрлө графика һәм уларҙың комбинациялары ярҙамында күрһәтеү;

– әҙәби һәм башҡа мәғлүмәттең ышаныслылығын уҡытыусы тәкдим иткән йәки үҙ аллы формулировкалаған критерийҙар буйынса баһалау;

– был мәғлүмәтте ныҡлы иҫтә ҡалдырыу һәм системалаштырыу.

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы белем алыу процесында кәрәкле,**коммуникатив** алымдарҙы үҙләштерә.

***Аралашыу:***

– фекерҙәрҙе ҡабул итеү һәм формалаштырыу, аралашыу шарттарына һәм маҡсаттарына ярашлы хис-тойғоларҙы сағылдырыу;

– телдән һәм яҙма формала үҙ ҡарашыңды белдереү;

– һөйләшеп аралашыу сараларына эйә булыу, конфликтлы ситуацияларҙың тәүшарттарын белеү, әҙәби әҫәрҙәрҙә уларға аналогтар табыу, низағтарҙы йомшартырға, һөйләшеүҙәр алып барырға һәләтле булыу;

– башҡаларҙың ниәтен аңлау, әңгәмәсегә хөрмәт күрһәтеү һәм уларҙың ҡаршы позицияһын дөрөҫ ҡабул итеү;

– фекер алышыу барышында тикшерелә торған теманың асылы буйынса аныҡ һорауҙар биреү һәм белем биреү мәсьәләһен хәл итеүгә һәм аралашыуҙың ыңғай барышын һаҡлауға йүнәлтелгән фекерҙәр әйтеү;

– уларҙың фекерҙәрен диалогта ҡатнашҡан башҡаларҙыҡы менән сағыштырыу, позицияларҙың айырмаһын һәм оҡшашлығын асыҡлау;

– башҡарылған эш (әҙәби эксперимент, тикшеренеүҙәр, проект) һөҙөмтәләрен асыҡтан-асыҡ күрһәтеү;

– сығышыңдың форматын үҙ аллы һайлау, презентацияның маҡсаттарын һәм аудиторияның үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып һәм уға ярашлы рәүештә иллюстратив материалдар ярҙамында телдән һәм яҙма текстар төҙөү;

***Үҙеңдең эшмәкәрлегеңде ойоштороу:***

– әҙәбиәт дәрестәрендә конкрет бер мәсьәләне хәл иткәндә команда менән (пар, төркөм, коллектив) һәм индивидуаль эшләүҙең өҫтөнлөктәрен ҡулланыу, заданиены хәл иткәндә төркөм менән үҙ-ара эш итеүҙең нәк ошо формаларын ҡулланыу кәрәклеген аңлатыу;

– колллектив уҡыу эшмәкәрлегенең маҡсатын билдәләү, уға сараларын күмәкләп төҙөү: ролдәрҙе бүлеү, килешеү, уртаҡ эш барышы һәм һөҙөмтәһе тураһында фекер алышыу;

– бер нисә кешенең фекерен дөйөмләштерә белеү; етәкселек итергә, заданиеларҙы үтәргә, буйһонорға әҙер булыуыңды күрһәтеү;

– әҙәбиәт дәресендә һәм кластан тыш уҡыу эшмәкәрлегендә уртаҡ эш ойоштороуҙы планлаштырыу, ҡатнашыусыларҙың һәр береһенең ролен билдәләү (уларҙың мөмкинлектәрен иҫәпкә алып), коллектив ағзалары араһында заданиелар бүлеү, төркөм эш формаларында ҡатнаша (тикшереү, фекер алышыу, «брейн-дауыл» һәм башҡалар) ҡатнашыу;

– эштең үҙеңә тәғәйенләнгән өлөшөн башҡарыуы һәм сифатлы һөҙөмтәгә өлгәшеү, ғәмәлдәреңде команданың башҡа ағзаларыныҡы менән координациялау;

– дөйөм һөҙөмтәгә индергән өлөшөңдөң сифатын әҙәбиәтдәрестәрендә үҙ-ара эш итеүҙә ҡатнашыусылар формулировкалаған критерийҙар буйынса баһалау;

– өлгәшкән һөҙөмтәләреңде тәүҙә ҡуйылған бурысменән, команданың һәр ағзаһының дөйөм һөҙөмтәгә, өлгәшеүгә индергән өлөшө менән сағыштырыу, эшләнгән эш өсөн яуаплылыҡ менән уртаҡлашыу һәм командаға үҙ эшең өсөн отчет бирергә әҙер булыу.

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы дөйөм белем биреүҙең**норматив** ғәмәлдәрен үҙләштерә:

***Үҙ-үҙеңде ойоштороу:***

– нәфис әҙәбиәттә һүрәтләнгән ситуацияларҙы анализлау нигеҙендә уҡыу процесында, шәхси тормошоңда, төрлө ситуацияларҙа тыуып торған проблемаларҙы асыҡлау һәм хәл итеү;

– индивидуальрәүештә төркөмдә йәки тотош төркөм менән ҡарарҙар ҡабул иткәндә төрлө ҡараштар араһында дөрөҫ ориентир тотоу;

– белем биреү мәсьәләһен (йәки унын бер өлөшөн) хәл итеүҙең үҙ аллы алгоритмын төҙөү, булған ресурстарҙы файҙаланып һәм үҙ мөмкинлектәреңде иҫәпкә алып, белем биреү мәсьәләһен хәл итеү ысулын һайлау, тәҡдим ителгән ҡарарҙарҙы раҫлау;

– саралар планын төҙөү (мәсьәләне хәл итеү алгоритмын тормошҡа ашырыу планы) һәм өйрәнелгән әҙәби объект тураһында яңы белем алыуҙы иҫәпкә алып тәҡдим ителгән алгоритмды төҙәтеү;

– бер ҡарарға килеү һәм унын өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыу;

***Үҙ-үҙеңде контролдә тотоу:***

– мәктәптә әҙәби белем биреүҙә үҙ-үҙеңде тота, үҙ-үҙеңде мотивациялай белеү;

– уҡыу процесында килеп тыуған ситуацияға аныҡ баһа биреу һәм уны үҙгәртеү планын тәҡдим итеү;

– контексты иҫәпкә алыу һәм белем биреү бурысын хәл иткәндә килеп тыуған ауырлыҡтарҙы алдан күреү, хәл итеүҙе үҙгәреүсән шарттарға яраҡлаштырыу;

– эшмәкәрлек һөҙөмтәләренә өлгәшеүҙең (өлгәшмәүҙең) сәбәптәрен аңлатыу, алынған тәжрибәне баһалау, килеп тыуғанситуацияла ыңғай моменттарҙы таба белеү;

– яңы шарттарҙа һәм үҙгәргән ситуацияларҙа, асыҡланған хаталарҙы, килеп тыуған ҡыйынлыҡтарҙы анализлау нигеҙендә эшмәкәрлеккә төҙәтмәләр индереү;

– һөҙөмтәнең маҡсатҡа һәм шарттарға ярашлылығын баһалау;

***Эмоциональ интеллект:***

– үҙ хис-тойғоларыңды ла башҡаларҙың хис-тойғоларын да контролдә тотоу һәләтен үҫтереү;

– хис-тойғоларҙың сәбәптәрен асыҡлау һәм анализлау;

– үҙегеҙҙе икенсе кеше урынына ҡуйып, әҙәби әҫәрҙәрҙән билдәле миҫалдарҙы анализлап, башҡаларҙың ниәттәренә төшөнөү;

– хис-тойғоларыңды белдереү ысулын көйләү.

***Үҙ-үҙеңде һәм башҡаларҙы ҡабул итеү:***

– икенсе кешегә, унын фекеренә аңлы ҡараш булыу, әҙәби персонаждарҙың мөнәсәбәттәре тураһында уйланыуҙарғанигеҙләнеп;

– үҙеңдең генә түгел, башҡаларҙың да хаталанырға хоҡуғы барлығын таныу;

– үҙеңде лә, башҡаларҙы ла нисек бар - шулай ҡабул итеү хөкөм итмәйенсә;

– үҙегеҙгә лә, башҡаларға ла асыҡ, ихлас булығыҙ;

– тирә-йүндәге бөтә нәмәне лә контролдә тотоумөмкин түгеллеген аңлау.

## Йөкмәткеле һөҙөмтәләр

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеү түбәндәгеләрҙе күҙ уңында тота:

– артабанғы рухи үҫешең өсөн башҡорт әҙәбиәтен уҡыуҙың һәм өйрәнеүҙең мөһимлеген аңлау; донъяны танып белеү һәм аңлау сараһы булараҡ системалы уҡыуҙың кәрәклеген формалаштырыу, кеше менән йәмғиәт араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яраштырыу, улар араһында күп яҡлы диалог булдырыу;

– башҡорт әҙәбиәтен халыҡтың төп милли һәм мәҙәни ҡиммәттәренең береһе, тормошто белеүҙең айырым ысулы булараҡ ҡабул итеү;

– үҙ халҡының күренекле мәҙәниәт әҫәрҙәрен, рус һәм донъя мәҙәниәтен өйрәнеү нигеҙендә башҡорт әҙәбиәтенең коммуникатив һәм эстетик мөмкинлектәренасыҡлау;

– төрлө жанрҙарҙа телдән һәм яҙма формала үҙ фекерен раҫларға, рәсмиләштерергә, аналитик интерпретация характерындағы фекер алышыуҙа ҡатнашырға, буш ваҡыттарында әҙәби әҫәрҙәр уҡыуҙы аңлы рәүештә планлаштырырға һәләтле формалашкан эстетик зауыҡы булған квалификациялы уҡыусыны тәрбиәләү;;

– төрлө этномәҙәни традицияларҙы сағылдырған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлау һәләтен үҫтереү;

– әҙәби текст менән фәнни, эшлекле, публицистик текстар араһындағы фундаменталь айырмаларҙы аңлау нигеҙендә тексты семантик һәм эстетик анализлау процедураларын үҙләштереү; уҡылғанды ҡабул итеү, анализлау, тәнҡитле баһалау һәм интерпретациялау, әҙәби әҫәрҙә сағылдырылған тормоштоң художестволы картинаһын эмоциональ ҡабул итеү генә түгел, интеллектуаль аңлау кимәлендә лә тормошҡа ашырыу оҫталығын формалаштырыу.

**Кластар буйынса предмет һөҙөмтәләре**

**5-се класс**

Уҡыусы шуға өйрәнә:

– башҡорт ауыҙ-тел ижадының төп жанрҙарын айырып, халыҡ әкиәттәренең, мәҡәлдәренең һәм әйтемдәренең темаларын һәм идеяларын халыҡтың әхлаҡи идеалдары тураһындағы фекерҙәрҙен үҫтереү өсөн нигеҙ итеп билдәләргә;

– төп һорауҙар нигеҙендә фольклорға һәм әҙәби текстарға семантик анализ үткәрергә;

– башҡорт яҙыусыларының һәм шағирҙарының әҫәрҙәрендә сағылдырылған башҡорт милли аңы өсөн мөһим булған мәҙәни-әхлаҡи идеяларҙы тормошҡа ашырырға, башҡа халыҡтарҙың айырым әҙәби ҡаҙаныштарын миҫалға килтерергә;

– башҡорт халҡы тормошонда туған әҙәбиәттең урынын, уның башҡа халыҡтар әҙәбиәте менән уртаҡлығын, үҙенсәлектәрен билдәләргә;

– башҡорт халҡының әхлаҡ-этик принциптарын әкиәт һәм әҙәби әҫәрҙәр геройҙарының ғәмәлдәре нигеҙендә асыҡларға;

– башҡорт мәҙәниәтенең һәм әҙәбиәтенең байлығын асыҡларға, Рәсәй халыҡтары мәҙәниәттәре контексында башҡорт милли традицияларын ҡыҙыҡһырларға;

– дәреслектәрҙә, бирелгән эштәргә уҡытыусының һорауҙарына нигеҙләнеп, фольклор әҫәрҙәрен һәм әҙәби текстарҙы анализларға, комментарийҙар бирергә, әҙәби әҫәрҙәрҙе башҡа сәнғәт әҫәрҙәре менән сағыштырға, үҙ аллы уҡыу өсөн әҫәрҙәр һайлап алырға.

**6-сы класс**

Уҡыусы шуға өйрәнә:

– башҡорт халыҡ йырҙарының, легендалары һәм риүәйәттәренең проблемаларын асыҡларға,башҡорт халҡының әхлаҡ идеалы тураһындағы фекерҙәрҙе үҫтерергә;

– уҡытыусы етәкселеге аҫтында һорауға яуап формаһында ябай тарихи-мәҙәни комментарийҙар һәм интерпретация характерындағы үҙ текстарын төҙөргә;

– Башҡорт әҙәбиәтендә һәм фольклорында, рус әҙәбиәтендә Салауат Юлаев образының ролен, Башҡортостан һәм Рәсәй тарихында уның шәхесе урынын аңларға;

– башҡорт фольклоры һәм әҙәбиәте әҫәрҙәрендә тарихи шәхестәрҙең образдарын ҡыҙыҡһырларға;

– Бөйөк Ватан һуғышытураһындағы әҫәрҙәрҙә башҡорт халҡының милли характерының үҙенсәлекле һыҙаттарын асырға.

**7-се класс**

Уҡыусы шуға өйрәнә:

– проблемаларҙы яҡтыртыу һәм башҡорт халыҡәкиәттәренең, халыҡ хикәйәләренең, йырҙарының һәм таҡмаҡтарының проблематикаһын асыҡларға, уларҙа халыҡтың эстетик үҙаңыныңсағылышына төшөнөргә, башҡорт әҙәбиәтендәге фольклор сюжеттарын һәм мотивтарын асыҡларға; Башҡортостан тәбиғәтетураһындағы әҫәрҙәрҙә мәҙәни-әхлаҡи ҡиммәттәрҙең сағылышын күрә белергә;

– 1812 йылғы Ватан һуғышында Тыуған илһөйәрлекте һаҡлау тураһындағы әҫәрҙәрҙә башҡорт милли характерының, уның илһөйәрлек, ҡаһарманлыҡ кеүек гүҙәл сифаттарының сағылышы тураһында фекер йөрөтөргә;

– курстың тематик сиктәрендә үҙ аллы уҡыу өсөн әҫәрҙәрҙе үҙ теләктәренә йәки тәҡдимдәренә ҡарап һайлап алырға;

– проектлау һәм ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлегенең элементар оҫталығына эйә булырға —электрон һөҙөмтәләрҙе проектларға һәм күрһәтә белергә;

– төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләүҙең элементар оҫталығына эйә булырға.

**8-се класс**

Уҡыусы шуға өйрәнә:

– Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең легендар геройҙары, башҡорт халҡының һәм илебеҙ халыҡтарының әхлаҡи идеалдары тураһындағы әҫәрҙәрҙең проблематикаһын, эстетикасылын аңларға; Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыуған ерҙең тәбиғәте тураһындағы әҫәрҙәрҙә башҡорт милли үҙ аңының төп мәҙәни-әхлаҡи асылының сағылышын аңларға;

– Фольклор әҫәрҙәрен һәм әҙәби текстарҙы үҙ аллы семантик һәм идеологик-эстетик йәһәттән анализларға, әҙәби тексты авторҙың уҡыусыға, хәҙерге заман кешеләренә - вариҫтарына өндәүе итеп ҡабул итергә; ентекле тарихи-мәҙәни комментарийҙар яһарға, конкрет эпизодты анализлау форматында интерпретация характерындағы үҙ текстарын булдырырға, проблемалы һорауға яуап бирергә;һүҙ сәнғәте әҫәрҙәрен башҡа төр сәнғәт әҫәрҙәре менән үҙ аллы сағыштырырға.

**9-сы класс**

Уҡыусы шуға өйрәнә:

– башҡорт яҙыусыларының һәм шағирҙарының әҫәрҙәрендә башҡорт милләте өсөн хас булған төп мәҙәни-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе аңларға;

– форма һәм йөкмәтке берҙәмлеге буйынса әҙәби әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан аңлы рәүештә ҡабул итергә, әҙәби тексттың идея һәм тематик йөкмәткеһенә үҙенең эстетик һәм художестволы ҡарашың булдырырға; нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәрен өйҙә уҡыу һәм өйрәнеү форматын үҙ аллы ойошторорға.

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**5 класс**

**1-се бүлек. Көҙ**

Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Башҡорт халыҡ әкиәттәре «Әминбәк», «Аҡъял батыр».

*Әҙәбиәт теорияһы:* халыҡ ижады төрҙәре, ауыҙ-тел ижады.Әкиәт жанры тураһында төшөнсә.

Тыуған ил,тыуған төйәккә иңлектәр. арналған әҫәрҙәр. Т. Ғәниева. «Уралиә тигән ил». С. Муллабаев «Шатлыҡлы иртә». Б. Бикбай. «Туған тел». А.Йәғафәрова «Яҡшылыҡ». Н. Әминева «Тыуған ер». «Башҡортостан тауҙары» (белешмә). «Тыуған ер» (ҡобайр). Ф. Рәхимғолова "Мин – Башҡортостандан!". Ә.Вахитов«Аҡһаҡал васыяты». Р. Ниғмәти. « Йәмле Ағиҙел буйҙары». Ғарипов Р. «Торналар». Б. Ноғоманов. «Йәйбикәменән Көҙбикә» («Йылбабайҙыңдүрт ҡыҙы» әкиәтенән өҙөк). Исәнғолов. Ф. «Йылмайыу». Ғ. Хисамов. «Аҡъяурын сал бөркөт».

*Әҙәбиәт теорияһы:* Сағыштырыу, синоним, антоним,омоним тураһында төшөнсә.

**2-се бүлек. Ҡыш**

Башҡорт ауыҙ-тел ижадында (мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар). Башҡорт халыҡ йырҙары. Түбәнге кластарҙа алынған белемдәрҙе ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү.

*Әҙәбиәт теорияһы:*Мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтарға төшөнсә

Ҡышҡы тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәр. Әлибаев С. «Ҡыш». Н. Мусин. «Ҡоралайҙар». Әхмәҙиев В. «Ҡышҡы урманда».

*Әҙәбиәт теорияһы: Хикәйә тураһында төшөнсә*

Башҡорт халыҡ әкиәттәре. «Ҡамыр батыр», «Ҡәмән менән Сәмән, картуфсәскән Сәлмән».

**3-сө бүлек. Яҙ**

Яҙ һәм яҙғы эштәр (башланғыс кластарҙа алынған белемде ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү) тураһында әҫәрҙәр. Р. Назаров "Яҙ килә". Хисмәтуллин З. «Сыйырсыҡ». С. Әлибаев «Яҙҙы кем алып килгән?» М. Кәрим. «Һеңлемден төшө». К. Даян. «Торналар».

*Әҙәбиәт теорияһы.* Йәнләндереү. Фразиологик берәмектәр.

Башҡортостан ҡоштары. Б. Ноғоманов. «Ҡарһылыу менән Яҙһылыу».

Еңеүселәр. А. Игнбаев «Еңеү көнө». К. Мәргән. «Ҡурайсының үлеме». Р. Ниғмәти. «Еңеүселәргә дан!»

Мәҫәлдәр. М. Ғафури. « Һарыҡты кем ашаған?» Л. Толстой. «Ике иптәш».

*Әҙәби теория:* Мәҫәл һәм аллегория тураһында төшөнсә.

**4-се бүлек. Йәй**

Йәйге көндәр көтә. З. Муллабаев. «Йомарт йәй». З. Хисмәтуллин «Урман ҡунағы». С. Агиш. «Турыҡай».

**6 класс**

**1-се бүлек. Уҡыу — белем шишмәһе**

Ә. Әхмәт-Хужа«Алмаш үҫә». У.Кинйәбулатов. Уҡытыусыма. Дәүләтбирдина Т. «Миҙгелдәр».

**2-се бүлек. Уҙған ғүмер – ҡалған хәтер**

Минең йырым — Башҡортостан! З. Биишева «Башҡортостан». Р. Ғарипов "Дан һиңә, дан, Башҡортостан!" Ф. Туғызбаева. «Эй яҙмышым минең – Башҡортостан!». С. Бабич. «Башҡортостан». Ғ.Хөсәйенов «Мөҡәддәс».

Тыуған ер тарихы. Н.Нәжми "Һинең ниндәй улыңмын мин?" Ә. Усманов. «Башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте». Ғ. Хөсәйенов «РудасыИсмәғил Тасим улы». Т. Ҡарамышева «Малайҙар». Л. Толстой. "Кешегә күпме ер кәрәк". Ә. Хәкимов «Еҙеүкәй янында» ("Һауыр ҡумта" романы буйынса).

Әҙәбиәттә азатлыҡ хәрәкәте темаһы. Башҡорт ихтилалдары.

Салауат Юлаев. Башҡорт әҙәбиәтендә башҡорт ихтилалдары темаһы. М. Иҙелбаев «Хушлашыу». Р. Бикбаев «Салауат ҡылысы». С. Злобин. «Салауат Юлаев». Ғ. Ибраһимов. «Сапҡын».

**3-сө бүлек. Төньяҡ амурҙары**

Башҡорт әҙәбиәтендә 1812 йылғы Ватан һуғышы темаһы. Рус-француз һуғышы тураһында бәйеттәр. Я. Хамматов «Төньяҡ амурҙары». Ҡаһымтурә (1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт полктары башлығы тураһында легенда).

*Әҙәбиәт теорияһы:*Бәйеттәртураһында төшөнсә

**4-се бүлек. Уралып яткан Уралтау**

Буракаев Д. «Урал тауҙары» (мәғлүмәт). Башҡорт халыҡ йыры «Урал».

Бикбаев Р. Уралыма. Я. Хамматов. «Самородок».

**5-се бүлек. Башҡорт йолалары**

Тәбиғәт менән берҙәмлектә. А. Ҡобағошов. «Ҡарға бутҡаһы тәмлеме?»
Ҡарамышева Т. Т. «Кәкүк сәйе». С. Агиш. «Ҡунаҡ һәм намыҫ».

Ф. Туғыҙбаева. «Һыу юлы».

**6-сы бүлек. Башҡорттар китте һуғышҡа**

Башҡорт халҡы геройҙары. Я. Хамматов. «Башҡорттар китте һуғышҡа»
Ҡ. Даян. «Шайморатов генерал».
Ә. Бикчәнтаев «Бөркөт һауала үлә».

Р. Насыров «Ил балаһы -Шәкирйән».
Башҡорт халыҡ ижады.
Башҡорт ауыҙ-тел ижады. Әкиәттәр «Урал батыр», «Алдар менәншайтан».
Көләмәстәр (анекдоттар).
Әҙәби мираҫ. Ҡол-Ғәли. « Йософ ҡиссаһы».

«Ҡармасан менән Сәрмәсән».
Үткән һәм хәҙерге
С. Юлаев. «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып», «Ҡарабай менән Сарыбай».
М. Акмулла. «Нәсихәттәр» .
Сәсәндәр ижады. «Һабрау», «Ҡобағош сәсән», «Байыҡ сәсән».

*Әҙәбиәт теорияһы.* Архаизмдар, неологизмдар, варваризмдар тураһында төшөнсә.

**7-се бүлек. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары**

Башҡортостандың халыҡ шағирҙары. М. Ғафури *(биографик мәғлүмәт*). "Бир ҡулыңды!"
М. Кәрим *(биографик мәғлүмәт).* "Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа".
Р. Ғарипов *(биографик мәғлүмәт).* «Аманат» *(ҡобайрҙан өҙөк).* Р. Бикбаев *(биографик мәғлүмәт).* «Халҡыма хат».
Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары
З. Биишева *(биографик мәғлүмәт.* «Сынаяаҡ уйнатыу» ("Кәмһетелгәндәр" романынан өҙөк).

Ә. Хәкимов *(биографик мәғлүмәт).* «Сәләх ҡарт» *("Туй" хикәйәһенән)*

## 7 класс

**1-се бүлек. Боронғонан аманат**

Халыҡ әкиәттәре. Башҡорт ауыҙ-тел ижады. Хайуандар тураһында әкиәттәр. «Етем төлкө». Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма». Батырҙар тураһында әкиәттәр. «Алып Батыр». Көнкүреш әкиәттәре. «Алтын тамсы», «Һаранбай менән Зиннәт ағай».

*Әҙәбиәт теорияһы:* Аллегория, гипербола һәм литотғатураһынды төшөнсә.
Халыҡ хикәйәләре. Боронғо ырым-ышаныуҙарға нигеҙендә тыуған хикәйәләр «Етегән йондоҙ». «Ай менән Зөһрә». «Сыңрау торна».
Башҡорттарҙың килеп сығышы тураһында хикәйәттәр. Үҫәргән. (Үҫәргән ырыуы башҡорттарының килеп сығышы тураһында легенда). «Ырғыҙ», «Йөрәктау.

Топонимик хикәйәләр. «Ямаш һәм Йомаш ауылдары», «Мәмбәт ауылы тарихы». Ауылдар тарихы.
Тарихи хикәйәләр. «Биксура», «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр».
Тормош-көнкүреш хикәйәләре. «Ғилмияза», «Зөлхизә».
*Әҙәбиәт теорияһы:* Легенда һәм риүәйәттәргә төшөнсә..

**2-се бүлек. Дуҫлыҡта һәм берҙәмлектә — көс!**
Тарихи йырҙар.Тыуған ил һәм халыҡтар дуҫлығы тураһында йырҙар. «Урал» (вариант), «Йәйләүек».
1773—1775 йылдарҙағы Пугачев ихтилалы тураһында йырҙар. «Салауат» (вариант). «Оло юл» (вариант).
1812 йылдағы Ватан һуғышы тураһында йырҙар. «Эскадрон», «Любизар».
Кантондар тураһында йырҙар. «Ҡолой кантоны», «Абдулла Ахун».
Ҡасҡындар тураһында йырҙар. «Буранбай», «Бейеш».
Көнкүреш йырҙары. «Зөлхизә», «Ғилмияза».
Таҡмаҡтар. «Ҡармасан һәмСәрмәсән» («Һуңғы Һартай» әҫәре буйынса).
Ноғман Мусин “Тайғаҡ баҫма”, Р. Байбулатов “Һарыбай”
Гүзәл илем!Бикҡолов Ш. «Урман...».
М. Ғафури. «Гөлдәрбаҡсаһында». Ж. Кейекбаев (биографик белешмә). «Оморҙаҡ олатай», «Туғандар һәм таныштар» (романдан өҙөк).
Балалар уйыны. «Сокор туп» (белешмә).
Башҡорт милли кейеме. (белешмә).
Игебаев А. "Онотманым һине ауылым!" М. Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында»

**3-сө бүлек.Ап-аҡ ҡарҙаряуа!**
К. Кинйәбулатова. «Һаумы, аҡ ҡыш!».С. Алибай. "Матур көн".
Ғ. Туҡай. «Ер йоҡоһо». Ә. Әһлиуллин. «Биҙәкле сана»
Ватанды һаҡлаусылар. Р. Шәкур. «Һаҡта тора илдең улдары». Ф. Аҡбулатова (биографик белешмә). «Атай икмәге».
В. Исхаков. «Кеше күңеле — тәрән дарья».
А. Баһуманов (биографик мәғлүмәт). «Юламан» «Ҡайҙа һин, генерал?» әҫәре буйынса))

**4-се бүлек. Ғәзиздәрҙән, ғәзиз әсәләр!**
Ғ. Зәйнәшева " Йырлайым әсәйем тураһында ".
З. Алтынбаева «Әсә һүҙе».
Ф. Исянғолов. (Биографик белешмә) «Бер йомғаҡ май ».
Ә. Бикчәнтәев «Яраланған бүре күҙҙәре».
Г. Яҡупова (биографик мәғлүмәт). «Мейес әбей».
Н. Игеҙйәнова «Өйрәлмәк»

**5-се бүлек. Их, күңелле яҙ килә!**
Р. Ниғмати. «Яҙ килде, яҙ!». М. Йәлил. «Йырҙарым» М. Ғафури .«Болон»
Х. Назар. «Йәйге йәшен».
Тыуған ерҙең ауазы.Һ.Дәүләтшина (биографик мәғлүмәт). «Айбикә».
Ю. Ухсай. «Болоттар». К. Аралбай. «Башҡорт теле».
М. Кәрим. «Әҫкәт Искәндәре» ("Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесынан өҙөк).С. Әлибай. «Ямғыр теләү»

## 8 класс

**1-се бүлек. Мәктәп — белем шишмәһе!**
Белемгә юл. С. Әлибаев «Мәктәп юлы!». Н. Мусин. «Һабаҡ».

**2-се бүлек. Көҙ - эш һәммуллыҡ миҙгеле.**
Икмәк — илдең байлығыР. Ханнанов «Икмәк ҡәҙере».
Р. Өмөтбаев «Әмир баҫыуы»».
*Әҙәбиәт* . Композицияға төшөнсә

**3-сө бүлек. Уҡытыусы — ниндәй гүзәл исем!**

Мәңгелек һөнәр. Р. Ғарипов. Уҡытыусыма. Р. Шаммас. «Күперһеҙ йылғалар».

**4-се бүлек. Салауат батыр ир ине**

Салауат Юлаев халыҡхәтерендә. Ф. Рәхимғолова «Салауат». Т. Дәүләтбирҙина «Салауат рухы». Кузбеков Ф. «Яу ораныбит һин, Салауат!». Я. Хамматов. (биографикбелешмә) «Салауат».

**5-се бүлек. Ҡыш**

Ҡышҡы пейзаж. Ш. Бабич (биографик мәғлүмәт). «Ҡышҡы юлда».
Б. Рафиҡов. (биографик белешмә) «Бүреләр».
И. Теләүмбәтов «Моралым таңы». О. Перовская «Мишка».

**6-сы бүлек. Данлы йылдар, шанлы йылдар**

Еңеүгә юл. М. Кәрим. «Үлмәҫбай».
Н. Ғәлимов. «Яуҙан ҡайтҡан ҡурай».
Р. Өмөтбаев «Башҡорттар китте һуғышҡа».
*Әҙәбиәт теорияһы:* Лирик-эпик поэмаларҙың үҙенсәлектәре
Психологизм күренешеВ. Шукшин. «Ҡайғы». Х. Назар. «Өс һүҙ».
М. Ямалетдинов «Иман». З. Ғәлимов«Ялан сәскәләре»

**7-се бүлек. Шаулап-гөрләп яҙ килә!**

Әсәйем –күңел ҡояшым.Ш. Бикҡолов (биографик мәғлүмәт). «Әсәйемдең кәңәштәре».Т. Ғиниәтуллин «Әсә һәм бала»
Яҙғы хикәйәләр. Р. Ғарипов «Яҙғы йыр». З. Ураҡсин «Алмағас». Р. Сафин «Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе»

**8-се бүлек. Тыуған ерем - Уралым**

Тыуған ер байлығы. К. Аралбай «Ете һүҙ ер тураһында». Б Бикбай. «Ер». Ж. Кейекбаев. «Урал тураһында ҡобайыр». Н. Мусин. «Һуңғы алыш». М. Уразаев «Еҙ ҡурай ». А. Йәғәфәрова «Кескәй шишмә». Ф. Рәхимғолова Ф. «Бал корто һәмкүбәләк». Ш. Янбаев. «Дегәнәк». Р. Солтанғәрәев «Һуңғы һунар». Ә.Хәметдинова «Йәшел дарыухана».

**9 класс**

**1-се бүлек. Тере шишмәләр**

Туған телем. Р. Ғарипов «Тел». Б. Бикбай. «Тере шишмәләр». Р. Мифтахов «Мираҫ». Т. Ҡарамышева «Һүҙ». И. Хәлимов «Төнгө моң».

**2-се бүлек. Кендегемде киҫкән ер**

Р. Мифтахов «Күрҙем һине». К. Шафиҡова «Тыуған яҡ». И. Абдуллин. "Үҙ яғыма ҡайтһам". Х. Туфан. «Ҡыр ҡаҙҙары». З. Вәлиди Туған «Тыуған төйәгемдә» ("Хәтирәләр" китабынан)
Нәзәкәтле тәбиғәт. М. Әбсәләмов «Йомагужа тирәктәре». Ф. Аҡбулатова «Тәбиғәт беҙҙең ярҙамда мохтаж» (мәғлүмәт).
А. Ғарифуллина «Гөрләүек». З. Алтынбаева «Балан». Башҡорт әҙәбиәтендә экологик проблемалар. Д. Шәрәфитдинов. «Йылғабағыры»
Ф. Ғазин «Ҡыраутейһен әйҙә..». М. Кәрим. «Айыу мажаралары».
В. Ғүмәров«Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үҫемлектәре».
Р. Каһир. «Алтын тамыр». К. Аралбай. «Янғантау».
*Әҙәбиәт теорияһы:*Әҙәби төрҙәртураһында төшөнсә (эпос, лирика, драма).

**3-сө бүлек. Данлы тарих**

Үткән быуын кәңәштәре
БейешӘ. «Башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн тарихы».
Ш. Бабич. (биографик белешмә) «Халҡым өсөн».
Б. Рафиҡов. «Һөйәнтүҙфажиғәһе».
Г. Хисамов (биографикбелешмә) «Алдар менән Тәфтиләү».
*Әҙәбиәт теориһыя:* Роман жанры тураһында төшөнсә

Тарихи-әҙәби ҡомартҡылар булараҡ башҡортшәжәрәләре. Юрматыырыуы шәжәрәһе. «Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне». Ш. Юлаев. «Яу».

М. Аҡмулла. «Инсафлыҡ»

**4-се бүлек. Батыр һәм тоғро ат**

С. Ярмуллин «Башҡорт аты». Т. Ғиниәтуллин «Буян».

Р. Өмөтбаев «Ғилмишәриф» («Атлы башҡорт» повесы буйынса).

Ғ. Вәлиуллин (биографик мәғлүмәт). «Ҡәлғә хужаһы һәм тотҡон».

*Әҙәбиәт теорияһы: Повестьтураһында төшөнсә*

Күңелле уйындар һәм ярыштар.Байрамдарыбыҙ тарихынан.

З. Әминев «Башҡорт һабантуйы». Д. Мәһәҙиев«Науруз байрамы».

Ҡурай моңомилләт тарихындаМ. Ямалетдинов Мираҫ Ш. Бабич. «Ҡурайҡайға». Ҡ. Аралбай. «Мәшһүрҡурайсы».

Р. Солтангәрәев (биографик мәғлүмәт). «Ишмулла ҡурайсы».

А. Айтҡолов (биографик мәғлүмәт)

*Әҙәбиәт теорияһы:Әҙәбиәт ғилеме тураһында төшөнсә*

Ватанды һаҡлау.Мифтахов Р. «Ҡалҡан». Назаров Р. «Һалдат». Р. Хисаметдинова «Малайҙар армияға китә». М. Ямалетдинов «Һалдат итектәре». И. Кинйәбулатов Бородино. Ә Үтәбаев. «Һаҡмар аға бит».

Н. Асанбаев (биографикбелешмә) «Ҡыҙылпаша»

**5-се бүлек. Еңеү көнө**

Ә. Моратов. «Тере хәтер». Р. Мифтахов «Боҙлоҡуҙ». Н. Нәжми (биографик белешмә). " Ҡайтманығыҙтыуған ерегеҙгә".

Йәлил М. "Ышанма". А. Мәһәҙиев. «Еңеү менән ҡайтҡан»

Й. Кейекбаев. «Зөбәй Үтәғолов».М. Кәрим. «Малайҙар».Ш. Янбаев. «Йәнекәйҡарт».

*Әҙәбиәт теорияһы:Әҙәби процесс тураһындатөшөнсә.*